ISSN 0207-1827

# Ағиҙел



11 | 2012

# Ағиҙел

Өфө,
ноябрь
2012

11(1075)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘҠОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева *(корректор)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.11. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 353 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0188.12.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2012 (11,1075)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Йомабикә Ильясова.** «Ғаләмдәрҙә мәңгелек бер тәртип» Шиғырҙар. ....................5
**Радик Хәкимйән.** Тыуған илем. Шиғырҙар. ....................13
**Дауыт Амангилдин.** «Уҡтар» циклы. Шиғырҙар. ....................17

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Гөлнур Яҡупова.** Ҡатындар. Трилогия.
Оло Йыһан – Кесе Йыһан. Өсөнсө китап. Дауамы. ....................24
**Ғималетдин Яруллин.** Зимагур. Повесть. ....................78

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Гөлфирә Гәрәева.** Хәҙерге прозала дин әһеле образы. ....................101

*"Ағиҙел"гә – 90 йыл*

Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
Ижади бойондороҡһоҙлоҡ... Мәңгелек проблемамы?
*(Дамир Шәрәфетдинов һәм Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай менән Фәнил Күзбәков әңгәмәһе).* ....................106

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Барый Ноғоманов.** Йәшлек дуҫтарымдың береһе
*(журналист һәм яҙыусы Эдуард Әъзәмигә 75 йәш).* ....................121

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Сәнә Сабирьянова.** Йәшәү мәғәнәһен фәндә тапты
*(Нәжибә Мәҡсүтованың тыуыуына 80 йыл).* ....................125

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Әхәт Сәлихов.** Йәшәүҙән ҡурҡмаған, үлемдән өркмәгән
*(ҡырым татар шағиры Бәкир Чобан-заданың тормошо һәм ижады).* **Бәкир Чобан-зада.** Шиғырҙар. ....................133

*1812 йылғы Ватан һуғышына – 200 йыл*

**Сабир Йыһаншин.** Тарихтың өнһөҙ шаһиттары. ....................139
**Әхмәт-Гәрәй Йәнғәлин.** Ҡыпсаҡтар ил һағында. ....................148

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Миңйыһан Хәлитова.** Ҡояш – баш остарымда. ....................156
**Миләүшә Ҡолмөхәмәтова.** Ҡәғбә кеүек уның һәр ташы. ....................169

СӘНҒӘТ

**Фәрзәнә Аҡбулатова.** Мәкәримдең мөхәббәте. ....................176
**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай.** Талант ҡояш нуры кеүек:
бер урынды болот ҡаплаһа, ул икенсе урындан сығып балҡый...
*(Рәссам Абрек Абыҙгилдинға 75 йәш).* ....................181

"АҒИҘЕЛ"ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Ю. Ильясова, Радик Хакимьян, Д. Амангильдин.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Г. Якупова.** Женщины. *Трилогия.* Малая Родина — Большой мир. Третья книга. *Продолжение.*
**Г. Яруллин.** Зимогор. *Повесть.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Г. Гареева.** Образ представителя духовенства в современной прозе.

*«Агидель» — 90*

*Художественная литература: мечта, реальность, требование жизни*
**Ф. Кузбеков.** Творческая независимость
*(интервью с Дамиров Шарафетдиновым и Ахмером Гумером-Утябаем).*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**Б. Нугуманов.** Друг молодости
*(75 лет журналисту, писателю Эдуарду Агзами).*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**С. Сабирьянова.** Смысл ее жизни — наука *(80 лет со дня рождения Н. Максютовой).*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**Бекир Чобан-заде.** Вот и все! *Стихи.*

*200 лет — Отечественной войне 1812 года*

**С. Зиганшин.** Свидетели истории.
**А. Янгалин.** Кипчаки на страже родины.

ДУХОВНЫЕ СОКРОВИЩА

**М. Халитова.** Солнце над головой.
**М. Кульмухаметова.** Как Кааба ее каждый камень.

ИСКУССТВО

**Ф. Акбулатова.** Любовь Макарима.
**Ахмер Гумер-Утябай.** Талант — как солнце
*(75 лет художнику А. Абызгильдину).*

ПИСЬМА В "АГИДЕЛЬ"

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

# ЙӘШӘҮҘӘН ҠУРҠМАҒАН, ҮЛЕМДӘН ӨРКМӘГӘН

*(Ҡырым татар шағиры Бәкир Чобан-заданың тормошо һәм ижады)*

XX быуаттың танылған ҡырым татар ғалимы һәм шағиры Бәкир Чобан-зада 1896 йылда Ҡырымда, Ҡараһыубаҙарҙа, көтөүсе ғаиләһендә донъяға килә. Башланғыс белемен тыуған илендә уңышлы тамамлағандан һуң, хәйриә ойошмаларының матди ярҙамы менән Истамбулға белемен камиллаштырыу өсөн ебәрелә. Бында ул 1909 – 1914 йылдарҙа мәшһүр Галатасарай лицейында (иҫке исеме Мәктәб-и Солтаниә) уҡый, ғәрәп, француз телдәрен өйрәнә. Ижтимағи тормошта әүҙем ҡатнаша, уҡыусыларҙың «Ватан» йәмғиәте ағзаһы була. 1913 йылда нәшер ителгән «Йәш татар яҙыусылары» йыйынтығында «Әсәйең ҡайҙа» поэмаһын һәм «Һабансының тупраҡҡа маҡтауы» шиғырын баҫтыра.

1914 йылда Ҡырымға ҡайтып киткәндән һуң, Төркиәгә кире килә һәм Истамбул университетына уҡырға инә. Бында ул атаҡлы венгр профессоры Дьюла Месарош менән таныша. Венгр ғалимының ярҙамы менән 1916 йылда Будапешт университетының тарих һәм филология факультетында уҡый башлай. Университетты тамамлағас, 1919 йылда «Кодекс Куманикус»та тура килмәгән тип уйланылған сингармонизмдар һәм төрки телдәрҙә артикуляцияның төп мәсьәләһе» исемле тема буйынса докторлыҡ дисссертацияһын яҡлай. Венгрияла йәшәгән осорҙа ла ул шиғриәт менән бәйләнешен өҙмәй. Оҙаҡ йылдар сит илдәрҙә йәшәүе шағирҙың әҫәрҙәрендә сағылыш таба. Уларҙың халыҡ тормошон, фольклорын, телен яҡшы белгән шәхес тарафынан ижад ителеүе күренеп тора.

1920 йылға тиклем Бәкир Чобан-зада Будапештағы Көнсығыш академияла уҡыта. Ҡырымға ҡайтҡас, ул Ҡырым (Таврия) университетында уҡытыусы, профессор, көнсығышты өйрәнеү факультеты деканы булып эшләй. Университет ректоры итеп тәғәйенләнһә лә, ул, латин алфавитына күсеү хәрәкәтендә ҡатнашыу өсөн, Баҡыға, яңы төрки алфавиты комитетына, эшкә китә. Бында ул Әзербайжан дәүләт университетының әзербайжан теле һәм әҙәбиәте бүлеге, көнсығышты өйрәнеү факультеты деканы вазифаларын башҡара, төрлө ғилми совет һәм ойошмаларының эшмәкәрлегендә ҡатнаша. 1926 йылда Баҡыла үткән тәүге Бөтә Союз тюркология съезын ойоштороуҙа ҡатнаша. Съездың уңышлы үтеүенә бик күп көс һала. Ултырыштарҙа ул «Төрки телдәренең үҙ-ара мөнәсәбәте», «Төрки телдәрҙә ғилми терминология төҙөү принциптары» темаларына сығыштар яһай.

Бәкир Чобан-зада төрки телдәр буйынса төрлө төбәктәрҙә үткән ғилми конференцияларҙа әүҙем ҡатнаша, бик күп ғилми китаптар яҙа. Уның әҫәрҙәрендә башҡорт теле һәм халыҡ ижады материалдары ҡулланыла.

2009 йылда Әзербайжан Фәндәр академияһы Көнсығыш ҡульяҙмалары институты тарафынан нәшер ителгән Чобан-зада әҫәрҙәре йыйынтығының беренсе томында башҡортса материалдар ҙа урын ала.

Ҡырымда йәшәгән осорҙа Бәкир Чобан-зада ҡыҫҡа ваҡыт Милли фирҡә ойошмаһының ағзаһы була. Шуның өсөн ул, репрессия дәүере башланғас, «буржуаз миллиәтселек»тә ғәйепләнә. Ялаларҙан ҡотолоу теләге менән Чобан-зада, милли фирҡә ағзаһы булғаны өсөн үкенеүен белдереп, 1929 йылда Әзербайжан һәм Ҡырым гәзиттәрендә хаттар баҫтыра. Әммә барыбер 1937 йылда атып үлтерелеүгә хөкөм ителә.

Үҙенең үлемен алдан һиҙгән кеүек, ул «Моңло ҡурай» (1922) исемле шиғырында шулай тигән:

*«Бер үле булайым, ҡәберһеҙ, ташһыҙ,*
*Яҙмышһыҙ, хәтерһеҙ, ялғансы ҡояшһыҙ!..*
*Теймәһен тәнемә тетрәгән ҡулдар!..*
*«Үлде» тимәһен тыумай үлгәндәр!..»*

Үткән быуаттың золом ҡорбандарының ҡайһы берҙәре кеүек, ул да 1957 йылда аҡлана. 1993 йылда тәү тапҡыр, уның тыуыуының 100 йыллығына бағышлап, Симферополдә халыҡ-ара ғилми конференция ойошторола. Ғилми һәм шиғри китаптары ла яңынан нәшер ителә башлай. Башҡорт телендә иһә шиғырҙары тәү тапҡыр баҫыла.

**Бәкир**
**ЧОБАН-ЗАДА**

## *Вәссәләм*

Ҡалаларҙан, ауылдарҙан,
һәр төрлө кешеләрҙән нәфрәт итәм.
Тфү-ү-ү-ү! Эй, тормош, шайтани
һәм илаһи хикмәт!

М. Горький.

*Күңелем ауырый, күҙем тоноҡ.*
*Йәшәү һыуыҡ, үлем һыуыҡ...*
*Яҙыу, шиғыр, фекерем боҙоҡ...*
*Һис беренең кәрәге юҡ, вәссәләм.*
*Яҙҙар, тиҙәр, беҙгә килә.*
*Ҡоштар һайрай, гөлдәр көлә...*
*Хайуандар ҡол кешеләргә...*
*Инанмайым һис беренә, вәссәләм...*
*«Фәлән батыр, төгән ҡурҡаҡ...»*
*«Әхмәт уғры, Мәхмүткә баҡ!»*
*«Ниндәй уғры, ниндәй ап-аҡ!»*
*Инанмайым, бары алсаҡ, вәссәләм...*
*Бераү һөйгән, күҙ йәш түгә...*

*Берәү белгән, күп һүҙ әйтә...*
*Берәү батыр, һуғыш һөйә...*
*Бары ишәк, бары дөйә, вәссәләм...*
*Халыҡҡа хеҙмәт иткән дә бар...*
*Халыҡты эттәй иткән дә бар...*
*Йәннәттәргә киткәндәр бар...*
*Бары уғры, бары һыйыр, вәссәләм...*
*Ысын түгел ни күк, ни ер,*
*Ник быларҙан тыуған беҙҙәр...*
*Тәңрем, йәшәү – бөйөк хурлыҡ,*
*Беҙгә яҡшы үлемде бир, вәссәләм...*

*7 март, 1917 йыл.*
*Будапешт.*

## Әсәйем

*Әкрен-әкрен ҡояш бата, күк ҡарая,*
*Ҡыҙыл, ҡара болоттар ҙа үтеп бара.*
*Тәҙрәмдән тауҙарға мин ҡарайым,*
*Тауҙар аша йортҡайыма етешәйем.*
*Унда, иңде беләм, күптән аҡшам,*
*Ятсы ҡыла, зекер итә бахыр әсәм.*
*Сәждә итә, уҡый. Ҡөрьән үбә,*
*Ҡул күтәрә, ялбара, күҙ йәш түгә:*
*«Бәкирем, – ти, – арыҫланым, күңел күҙем!*
*Ҡай ерҙәрҙә йөрөй, бахыр ҡуҙым?*
*Юҡһа, бер йөрәкһеҙ үлтерҙеме?*
*Йәш ғүмерҙе әсе елдәр осорҙомо?*
*Минең башым, ҡарыуым, аҡылым, фекерем,*
*Бары һиндә, балаҡайым, Сәйетбәкирем.*
*Көн күрмәнем, уңманым, Ҡәҙер Мәүләм!*
*Тик бер ҡаҙнам, ынйым бар – бахыр балам.*
*Наҙлап, һыйпап үҫтерҙем йырым менән*
*Йондоҙҙарҙан һаҡлап, яман күҙҙән...*
*Әсә күңеле ниндәй хисле була,*
*Бик беләһең, үҙ балаң булмаһа ла:*
*Төндә төрлө төштәр күреп ул уяна,*
*Иң һуң изге төш күренеп күңелен ала.*
*Иртән күршене тиҙ саҡыртып,*
*Төшөн әйтә, юрата фал ҡаратып».*
*Әкрен-әкрен ҡояш бата, күк ҡарая,*
*Төрлө уйҙар күңелемде һарып ала.*
*Ҡараңғынан ҡурҡмайым, йортҡа китәм,*
*Әсәйемә мин йүгереп-йүгереп етәм.*
*Аяғына йығылып, «Ғәфү ит!»,– тием;*
*Нишләп Тәңре аңғартмай, мин белмәйем;*
*Күп ваҡыттар төшөмә үҙе килә,*
*Башым һыйпай, күҙҙәремдән үбә.*

*1 июнь, 1918 йыл.*
*Будапешт.*

## Ҡараңғы, һыуыҡ...

*Ҡараңғы, һыуыҡ...*
*Ут та юҡ, нур ҙа юҡ...*
*Ҡәберҙәр һыуыҡ, ҡәберҙәр һыуыҡ...*
*Болоттар китә,*
*Тауҙарға етә,*
*Бик тыныс кисә, бик тыныс кисә...*
*Тирбәлә ҡурай,*
*Быжылдай, йырлай,*
*Хәлдәрҙе һорай, хәлдәрҙе һорай...*
*Яландар,ҡарҙар*
*Өҫтөндә боҙ, ҡар,*
*Аҫтында маҙар, аҫтында маҙар...*
*Булһа бер йондоҙ,*
*Һөйкөмлө бер ҡыҙ:*
*Фатима, Сүндүз, Фатима, Сүндүз...*
*Булһам бер бала,*
*Ҡайғылы ана*
*Түшәгем һала, түшәгем һала...*
*Өшөйөм, әсәй*
*Өҫтөмдө япмай,*
*Мин үкһеҙ малай, мин үкһеҙ малай...*

*25 декабрь, 1919 йыл.*
*Будапешт.*

## Бер һарай ҡорасаҡмын!..

*Бер һарай ҡорасаҡмын!.. Хан булмаһын эсендә,*
*Ҡол, батрак, аслыҡ, хурлыҡ, ҡан булмаһын эсендә...*
*Ташын ят илдәрҙән килтермәҫмен һис,*
*Етәсәк уға илемдә сыҡҡан кирбес...*
*Бик бейек булмаһа ла күктең түбәһе,*
*Нигеҙе ныҡ булһын, яҡтырһын һәр осо...*
*Тәҙрәһе киң булһын, инһен яҡтылыҡ,*
*Ярлыға һәр ваҡыт ҡапҡаһы асыҡ...*
*Киҫмәһен ҡибла елен һис бер өйҙөң,*
*Булмаһын ҡаралтыһы фәлән бейҙең.*
*Бер һарай ҡорасаҡмын: хан булмаһын эсендә,*
*Ҡол, батрак, аслыҡ, хурлыҡ, ҡан булмаһын эсендә...*
*Аҫтын өҫкә килтереп йыяйым торған ерен,*
*Ул урында ятҡан батырҙарҙың һөйәген...*
*Боларман балсыҡты бутайым,*
*Һәр ҡәбергә: «Тормош!» – тип ҡысҡырайым...*
*Биҙәлеп изгеләшһен дүрт диуары,*
*Шишмәһе, сәскәләре, киң аҙбары...*
*Тапама изге ерҙе инде эшһеҙ,*
*Һал һарай, ҡор дәүләтең – булһын ишһеҙ...*
*Бер һарай ҡорасаҡмын, таш булмаһын эсендә,*

*Тик тормош менән йәшлек, тик йән булһын эсендә,*
*Ас булмаһын эсендә..*

*22 май, 1920 йыл.*
*Лозанна.*

## *Моңло ҡурай*

*Бер йылға булһам ине лә түгелһәм ине күлгә,*
*Йә бер күл булһам ине лә йәйелһәм сүлгә!..*
*Бер йүкә булһам да ҡаялар эсендә,*
*Әйләндерһә кәүҙәмде ҡарыулы селдәр,*
*Ҡаянан ҡаяны һыпырған елдәр,*
*Йәшен йәшнәһен йәш фидан эсендә...*
*Кескенә сауаптар, кескенә хеҙмәттәр,*
*Кескенә гонаһтар яҙмаһын мәләктәр!..*
*Үлемдән мин ҡурҡам ғафилдар кеүек,*
*Үләйем тауҙарҙа: асылым – кейек!..*
*Бер үле булайым ҡәберһеҙ, ташһыҙ,*
*Яҙмышһыҙ, хәтерһеҙ, ялғансы ҡояшһыҙ!..*
*Теймәһен тәнемә тетрәгән ҡулдар!..*
*«Үлде» тимәһен тыумай үлгәндәр!..*
*«Керле» тип йыумағыҙ, үлгәндәр таҙалыр,*
*Үлгәндәр ҡайғыһыҙ, ҡурҡыуһыҙ, тигеҙҙәр.*
*Йәм-йәшел ерҙәрҙә, тирәктәр төбөндә*
*Күмелһен тағы бер йәшәргә теләһә!*
*Йәннәткә инергә сауап эшләһә,*
*Китабы барҙың асҡысы кеҫәлә!..*
*Йәшәүҙән ҡурҡмаһа, үлемдән өркмәһә,*
*Йәшәйем тиеп тә теләнеп йөрөмәһә,*
*Һәр ваҡыт тырышҡан, тир түккән егеттәр,*
*Йәннәткә инһәләр, рөхсәтһеҙ инерҙәр!..*

* * *

*Бәкир, һин хәлһеҙ, ҡарыуың ҡайтҡан,*
*Әсәйең бишектә тылсымдар әйткән;*
*Һин бер тар күлдә, баҡалар – дуҫтарың,*
*Шәп сапҡан ваҡытта шуларҙы уҙғанһың!..*
*Сыҡтың күктәргә, ҡамыштан өҫкәрәк!..*
*Йөҙгәнең һаҙлыҡ, һаҙлыҡ-күләүек!..*
*Белмәйем, яҡшымы баштүбән бер баш?..*
*Тәҡдиргә яҙғас, ҡотолормо баш?..*
*Егетлек теләгең, асыуың да ваҡ...*
*Йортоңда ҡая юҡ, һыуҙарың ҡораҡ.*
*Кескенә тауҙарҙан вулкандар сыҡмаҫ,*
*Тәпәшәк ағасты йәшен дә һуҡмаҫ...*
*Яңғыҙ бер нәмәң – егетлек малың:*
*Ҡотҡарһа ҡотҡарыр моңло ҡурайың!..*

*Апрель, 1922 йыл.*
*Аҡмәсет.*

## *Болоттар, болоттар!*

*Болоттар, болоттар!..*
*Китеүсе болоттар,*
*Джунгарға, Ҡытайға*
*Етеүсе болоттар!..*
*Алығыҙ мине лә, күнелем асылһын,*
*Күҙемдән йәштәрем йортома сәселһен!..*
*Болоттар, болоттар!*
*Борсаҡлы болоттар!..*
*Ал, йәшел, һарылы,*
*Билбаулы болоттар!*
*Алығыҙ, китәйек бик алыҫ ерҙәргә,*
*Салғырҙа етенен ағартҡан дилбәргә!..*
*Болоттар, болоттар!..*
*Үлергә теләйем,*
*Үлгәндән һуң күктә*
*Көлөргә теләйем!..*

*Алығыҙ, китәйек, дарьялар ситенә,*
*Ҡарайыҡ яҡындан Сулпандың битенә!*
*Болоттар, болоттар!*
*Ҡамышлы күлдәрҙә,*
*Йондоҙҙар тетрәгән*
*Ҡырыйһыҙ сүлдәрҙә.*
*Мине лә алығыҙ гөрөлдәп яуғанда,*
*Тауҙарға һыйынып, йылғаға ҡойғанда!..*
*Болоттар, болоттар!*
*Ҡай ерҙән килдегеҙ?*
*Ауылым, әсәмдең*
*Хәлдәрен белдегеҙ?..*
*Әйтегеҙ, бергәләп белдермәй илайыҡ!..*
*Юлдарға төшәйек, һарғайып һулыйыҡ!..*
*Болоттар, болоттар!*
*Йәйләүгә китегеҙ!..*
*Әсәмде күрһәгеҙ,*
*Сәләмдәр әйтегеҙ!..*
*Йыуығыҙ әсәмдең йәшле күҙҙәрен!*
*Ҡулдарын үбегеҙ, онотһон ҡайғыһын!..*

**1928 йыл.**
**Әхәт СӘЛИХОВ тәржемәләре.**